ISSN 0869 – 0731

Башҡортостан Республикаһының балалар журналы

# Аҡбуҙат

№3.2023




0+

podpiska.pochta.ru

# Сулпылар

*(Хикәйә)*

Яҙ Әсәйҙәр байрамынан башланып киткәндәй. Был көндө бөтә донъя мөғжизәгә тулыр төҫлө... Һары сәскәләрҙән биҙәлгән күлдәген Наҙгөл ултырғысына матурлап, байрамға әҙерләп элеп тә ҡуйҙы. Шиғырын, йырҙарын ҡабатланы.

Баҡсаны ла ҡалдырмай йөрөргә тырышты. Сөнки тәрбиәселәре менән көн дә сығыш яһарға әҙерләнәләр.

Бәләкәстәр ялдан һуң баҡсаға йыйылды. «Аҡбуҙат» төркөмөн байрамға әҙерләнергә саҡырҙылар.

Тәрбиәсе:

– Әйҙә, Наҙгөл, шиғырыңды һөйләп күрһәт әле! – тине.

– Аҡ ҡайындың япраҡтары, сулпыларҙай, сың-сың итә, – тине лә Наҙгөл шымып ҡалды. Тәрбиәсеһе нисек кенә үтенеп һораһа ла, ҡыҙыҡай шиғырын ятламаны.

– Сулпылар, сулпылар, – тип ҡабатланы Наҙгөл эстән генә. Әсәһе уға бөгөн өләсәһенең сулпыларын сәсенә үреп ебәрергә тейеш ине бит. Онотҡан...

Эштән һуң әсәһе Наҙгөлдө баҡсанан алырға килде. Ҡыҙының кәйефһеҙ икәнен һиҙҙе яҡын кешеһе. Күңелен күрергә теләп, кеҫәһенән кәнфит тә сығарып ҡараны. Ҡыҙсығының быға ла иҫе китмәне.

– Наҙгөл, хәлдәрең нисек? Шиғырыңды тәрбиәсе апайыңа һөйләп ишеттерҙеңме? – тине ул.

– Әсәй, нишләп һин минең сәсемде сулпы менән үрмәнең? Мин ул шиғырҙы сулпыһыҙ һөйләмәйем тип әйттем дә инде! – тине ҡыҙыҡай ризаһыҙлығын белдереп.

– Иииий, аҡыллымды минең! Шуның өсөн кәйефең төштөмө ни? Иртәгә түгел, бына бөгөн ҡайтҡас та сулпы менән үреп ҡуйырбыҙ сәсеңде! – тине әсәһе ҡыҙының башынан һыйпап.

Эйе, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының борон-борондан һаҡланып килгән милли биҙәүесе бит ул – сулпылар. Уларҙы тәңкәнән эшләйҙәр. Сәстәрҙе ике яҡҡа толомлап үреп таҡҡандар.

podpiska.pochta.ru

## Өләсәйем һандығы

Түшелдерегең дә бар! Өләсәйең тыуған көнөңә бүләк иткәйне! Ул да тәңкәләрҙән эшләнгән бит.

– Әсәй, өләсәйемде лә иртәгә байрамға саҡырайыҡ, йәме! Шиғырымды уға ла ишеттергем килә, – тип йылмайҙы Наҙгөл.

Гөлназ ИСКӘНДӘРОВА.



Рәссам Таңсулпан КҮГӘРСЕН



podpiska.pochta.ru

*Супиянат МАМАЕВА*

# Мин инде ағай булдым

Мин хәҙер бик ҙур үҫтем,
Бәпес алып ҡайттылар.
Ул миңә ҡустым була,
Мин – ағай, тип әйттеләр.
Хәҙер мин шаярмайым да,
Өйҙә лә болартмайым.
Бары ҡустым сәңгелдәген
Бәүелтеп уйнатайым.
Ҡарап тора миңә ҡустым
Ҙур итеп асып күҙен.
Төштәрендә көлә-көлә
Үҫеп тә бара үҙе.
Бер иҫнәй ул, бер кирелә,
Әй, тәмле итеп йоҡлай.
Һис ҡурҡма, ҡустым минең,
Һине ағайың һаҡлай!



Куар-код аша журналдың сайтына инеп, шиғырҙарҙы рус телендә уҡырға була.

# Әсәм теле

Мәскәүҙә йәшәһәм дә
Һөйләшәм үҙ телемдә.
Уны миңә өйрәтә
Ҡәҙерле әсәйем дә.

Яңы һүҙҙәр аңлата
Ағайым да, атам да.
Ғәзиз өләсәйем дә
Төҙөндөрә хатамды.

Туған телдә йырлайым,
Бейеймен туған көйгә.
Башҡаса һөйләшеүҙе
Тыйҙы олатай өйҙә:

– Яҡшы бала иң тәүҙә
Әсә телен белер, – ти, –
Башҡа телдәр янына
Үҙе сабып килер, – ти.

Әсәм теле ҡолағыма
Изге моңдай салына.
Ғәзиз туған телемде
Бирмәм донъя малына.

Рәссам Азамат ГАРИПОВ

podpiska.pochta.ru

## Минең дуҫтарым

Бөтә уйынсыҡтарым
Уратып алған мине.
Уларҙың араһынан
Табыуы ҡыйын мине.

Минең буйлылары бар,
Уйнайҙар минең менән.
Баҡсаға ла барамын
Һәр көн береһе менән.

Ҡәрҙәштәрем йыйылһа,
Минең күңел хуш була.
Шундай оло өйөбөҙ
Улар юҡта буш була.

## Аҡыллы Марат

Беҙҙең Марат – зирәкбай,
Биш йәш була үҙенә.
Аҡыллы ҡарт тиерһең,
Ҡолаҡ һалһаң һүҙенә.
Өләсәһенә Марат
Өйөндә ярҙам итә.
Олатаһына ҡырға
Төшкө ашты ла илтә.
Себештәргә ем һибә,
Быҙауына һыу бирә.
Былдай аҡыллы бала
Бармы тағы? Кем белә?



Ҡумыҡ теленән Лариса АБДУЛЛИНА тәржемәһе.

podpiska.pochta.ru

Башҡортостандың халыҡ шағиры Әнғәм АТНАБАЕВтың 95 йыллығына Тәтешле районы Иҫке Күрҙем мәктәбе уҡыусылары ижади эштәрен тәҡдим итә.



«Тыуған яғым», Элиза ХУЗИНА.



«Тыуған ерем», Гөлшат ӘХМӘТНУРОВА.



«Ул болоттар хәҙер юҡтыр», Альбина МОСТАФИНА.



«Еҙ ҡыңғырау моңдары», Ильяна НӘСИФУЛЛИНА.



«Ҡара икмәк», Самира СӘЛӘХОВА.

podpiska.pochta.ru



Самира ВӘХИТОВА.
Стәрлетамаҡ ҡалаһы.



Фатима ӘХМӘТШИНА.
Ф. Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһы.

Айгөл РӘХМӘТУЛЛИНА. Ҡырмыҫҡалы районы Мөкәй ауылы.



podpiska.pochta.ru

# В

*ҮҘЕМ УҠЫЙЫМ!*



ВА-ТАН



ВА-ЗА



ВЕ-ЛО-СИ-ПЕД



ВА-ҠЫТ



ВУЛ-КАН

Рәссам Лариса ФРОЛОВА

podpiska.pochta.ru

# Flowers – [флауәз] – сәскәләр

Тимур РӘХМӘТУЛЛИН әҙерләне

5. Chrysanthe mums – [хрисанҙә мумс] – Алтын сәскә
7. Lily – [лили] – Лилиә
1. Sunflowers – [санфлауәз] – Көнбағыш
4. Mac – [мәэк] – Мәк
5. Chamomile – [кәэмәмил] – Аҡсәскә
9. Narcissist – [наасисист] – Нәркәс
2. Rose – [рәуз] – Рауза
10. Tulip – [тюулип] – Ләлә
6. Bell – [бэл] – Ҡыңғырау сәскә
3. Snowdrops – [сноудропс] – Умырзая
8. Dandelion – [дәэндилайән] – Бәпембә




bookiska.pochta.ru

*«Аҡбуҙат»тың дуҫтары*



Әбйәлил районы Таһир Күсимов исемендәге Аҫҡар гимназияһының 1»а» класы уҡыусылары (28 бала!) «Аҡбуҙат» журналына яҙылған. Класс етәкселәре Илгиз Истамғәлин балаларҙы милли рухта тәрбиәләүгә бар күңелен һала!



Өфө ҡалаһының 51-се башҡорт балалар баҡсаһының «Йәйғор» төркөмө «Аҡбуҙат» журналын яратып уҡый. Тәрбиәселәре Шәүрә Ярмуллина кескәйҙәрҙе башҡорт рухитендә тәрбиәләй!



Акбузат китапханаһы

*Лилиә* НУРЕТДИНОВА

# Ҡуяндар



Рәссам Лариса ФРОЛОВА








## Йорт ҡуяны

Кеше йорт ҡуянын эт, һыйыр һәм кәзәнән һуң эйәләштергән. Донъяла йорт ҡуяндарының ике йөҙҙән ашыу тоҡомо бар. Уларҙы шартлы рәүештә дүрт төргә бүлергә була: декоратив, дебет һәм ит, тире өсөн тотолған ҡуяндар. Тоҡомдары: «Совет шиншиллаһы», «Калифорния», «Һоро һәм аҡ бәһлеүән», «Яңы Зеландия», «Полтава көмөшө», «Бельгия фландры» һ.б.

podpiska.pochta.ru



## Ҡуян тиҙ үҫһен өсөн

Тиҙ үҫһендәр өсөн йорт ҡуяндарына аҙыҡты төрләләндереп биреү мотлаҡ. Арпа, һоло, борсаҡ, кукурузды яратып ашайҙар. Алма, кишер, ҡыяр, ҡабаҡтан баш тартмаясаҡтар. Бешкән картуф тиҙ үҫергә, ауырлыҡ йыйырға ярҙам итә. Яңы сабылған бесәнде киптереп кенә ашаталар. Һыуына бысраҡ эләкһә, уны эсмәй. «Ҡуян кәбеҫтә ярата» тиһәләр ҙә, кәбеҫтә биреүҙән тыйылырға кәрәк. Бигерәк тә ҡыҙыл сөгөлдөр уларҙың эсенә тейеүе ихтимал.











podpiska.pochta.ru





## Ҡыр ҡуяны

Ҡыр ҡуяндары яңғыҙ, үҙ аллы йәшәй. Кәүҙәләре йорт ҡуяндарыныҡынан ҙурыраҡ. Улар ҡышын тунының төҫөн – аҡҡа, йәйен һороға алыштыра. Балаларын, тыуҙырғас, ҡыуаҡ аҫтында ҡалдырып китә. Күп йүгерергә, һикереп йөрөргә тура килгәнгә, аяҡтары көслө һәм оҙон.

## Балалары

Ҡыр ҡуянының балалары йөнлө тыуа. Тыуғанда уҡ яҡшы күрәләр, ишетәләр, ашай башлайҙар. Әсәләре уларҙы ҡарап үҫтермәй. Йорт ҡуянының балалары иһә яланғас тыуа, күҙҙәре күрмәй, ҡолаҡтары ишетмәй. Ҡуян 5-12 бала килтерә.







## Ҡуяндың теше үткер булһын

Ҡуяндың тештәре һау булыуы мөһим. Аҙыҡ-түлектә күҙәнәкле туҡыма (клетчатка) етәрлек булһын өсөн ҡырағай алма, миләш, тал, ҡайын, имән, ҡарағат, ҡурай еләгенең ботаҡтарынан торған миндек әҙерләйҙәр. Бөтнөк, кесерткән, әремдән яһалғаны төрлө ауырыуҙарҙан һаҡлай. Улар был миндектәрҙе яратып ашай.



## Ҡуян дебетенең файҙаһы

Дебет ҡуянының йөнөнән йылы һәм уңайлы ойоҡтар, бейәләйҙәр, башлыҡтар бәйләйҙәр. Иң мөһиме, был йөн аллергия менән йонсоғандар өсөн  зарарһыҙ. Бер ҡуян йөнөнән ике бейәләй бәйләргә була. Дебет ҡуянының үҙенсәлеге шунда: йөнөн ала башлаһаң, ялпашып ята ла, тыныс ҡына йөнөн алырға бирә.



podpiska.pochta.ru





## Шешҡолаҡтар ҙа ауырый

Ауырыу булдырмауҙың төп шарты – таҙалыҡ. Ҡуяндарҙың морон, күҙ тирәләре һәм ҡолаҡ эстәре таҙа булырға тейеш. Әгәр ҙә ҡолаҡтары тырналған, йә булмаһа ҡутырланған икән, ауырыу таралмаһын өсөн, тиҙ арала дауалау мөһим. Үткел ел, сифатһыҙ аҙыҡ та сирләтеүе ихтимал. Ҡул аҫтында йод, водород шыйыҡсаһы, тетрациклин майы, цинк пастаһы, эс китеүҙән һаҡлай торған дарыуҙар булырға тейеш.

podpiska.pochta.ru



## Йорт ҡуяны ғаиләһендә

Әсәй булырға йыйынған ҡуянға ҡараңғы оя хәстәрләү мөһим. Ул, ауыҙына бесән тултырып, ҡараңғы бүлмәгә ташый, ҡорһағының, ҡабырғаларының йөндәрен сәйнәй. Ошо мәлдә нык һыуһай, шуға ла алдында һәр ваҡыт һыу булырға тейеш.

10 көндән бәләкәй шешҡолаҡтарҙың күҙе асыла, улар яйлап ояһынан сыға. Өндәшеп, тауыш биреп торғанда, ҡулға эйәләштерергә мөмкин.





# РЕБУС




Ребустарҙы дөрөҫ сисһәгеҙ,
йәшелсә атамаларын уҡырһығыҙ!

Рәссам Илдар ҒӘНИЕВ

podpiska.pochta.ru

# «ИЖАД ИТЕРГӘ ЯРАТАМ!»




Өфө районы Алексеевка мәктәбенең 2-се класс уҡыусыһы Сәлмә Мөхәмәтйәнова мәктәптә яҡшы уҡый. Ул Алексеевка мәҙәнит йортона бейеү түңәрәгенә йөрөй. Сәлмә – бик әүҙем, зирәк, тырыш һәм ижади ҡыҙ. Сәғәттәр буйына һүрәт төшөрә, пластилиндан, ҡамырҙан һындар эшләү, конструкторлау менән мауыға, ҡағыҙҙы киҫеп, уйынсыҡтар эшләй. Өйҙә әсәһе менән ҡамыр аштары бешерә, салаттар әҙерләй. Өләсәһе Венера апай менән мәсеткә йөрөй, доғалар өйрәнә.

Сәлмә – «Аҡбуҙат» журналының дуҫы. Ағаһы Самат менән журналдың һәр һанын көтөп ала. Унда сыҡҡан китапсыҡтарҙы йыйып бара, ҡул эштәрен яһарға ярата. Сәлмә туған телен, илен, мәҙәниәтен яратҡан ҡыҙ булып үҫһен, тип теләйбеҙ!

Светлана ВӘЛИШИНА, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.

podpiska.pochta.ru

# Светофор һинең дуҫыңмы?

308-се башҡорт балалар баҡсаһында юл ҡағиҙәләрен дөрөҫ үтәүгә арналған сара уҙҙы. Һөнәри белгес тә саҡырылғайны. Ул өлкән инспектор, полиция лейтенанты Ҡотоева Кристина Эльдар ҡыҙы. Сараның төп маҡсаты – юл ҡағиҙәләре менән таныштырыу, белгәндәрҙе иҫкә төшөрөү һәм белемде нығытыу. Кристина Эльдар ҡыҙы светофор хаҡында һөйләне. Ә балалар һөнәрҙәрен күрһәтте, шиғыр ятланы.

Сараны алып барыусы йәнһүрәт геройҙары бик ҡыҙыҡлы тамаша әҙерләгәйне. Светофор Светофорович балаларҙан юл ҡағиҙәләрен ҡабатлатты. Йомаҡтар ҡойоу балаларға ҡыҙыҡлы булды. Артабан сара «Светофор – минең дуҫым», «Юлды дөрөҫ сыҡ!», «Машиналар» тигән уйындар менән дауам итте, балаларға «Хәүефһеҙ юл» тигәне бик оҡшаны. Йәнә лә балалар светофор төҫтәре буйынса командаларға бүленеп, ярыштарҙа ҡатнашты.

Розалия КӘРИМОВА.
Өфө ҡалаһы, 308-се башҡорт балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе.




podpiska.pochta.ru

# ЯРҘАМСЫЛ ДУҪ

*Гөлнара МОСТАФИНА*




Алһыу менән Булат мәктәптән ҡайтып бара.







Алһыу ҡарға бата. Итеге тороп ҡала.

Рәссам Лиана НИҒӘМӘТЙӘНОВА



podpiska.pochta.ru













Булат Алһыуҙың итеген һөйрәп сығара.









podpiska.pochta.ru

# Буям



Балалар! Бал яратҡан Айыухандың һүрәтен буяп ҡуйығыҙ әле!





Рәссам Лиана НИҒӘМӘТЙӘНОВА

podpiska.pochta.ru

# Башватҡыс








| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| С | Ы | Й | Ы | Р | С | Ы | Ҡ |
| Б | К | Ә | К | Ү | Г | Т | Я |
| Ө | Т | К | Ү | Г | Ә | У | Б |
| Р | О | Ҡ | О | Р | Р | Р | А |
| К | Р | Т → | У → | Р ↓ | С | Ғ | Л |
| Ө | Н | Й ← | А ← | Ғ | Е | А | А |
| Т | А | Ө | К | Ө | Н | Й | Ҡ |
| Һ | А | Й | Ы | Ҫ | Ҡ | А | Н |







Филвордта ҡош исемдәрен табып, һыҙып сығығыҙ! Уларҙы һүрәттәрҙә табығыҙ!

Рәссам Рида МӨХӘМӘТШИНА.

podpiska.pochta.ru

# Яҙ хәбәрселәре

Сафуан ӘЛИБАЙ һүҙҙәре
Данил ХӘСӘНШИН көйө




Йырлап төшә,
Йырлап төшә
Тамсылар бер көй.
Улар төшһә,
Улар тишһә,
Һалҡын ҡар ирей.

Саф тамсылар,
Саф тамсылар –
Яҙҙың йырсыһы,
Гүйә, улар,
Гүйә, улар –
Ҡояш тамсыһы!




Башҡортостан Республикаһының балалар журналы
Аҡбуҙат

**Балалар өсөн әҙәби-нәфис журнал**
**Литературно-художественный журнал для детей**
**Ойоштороусылары:**
Башҡортостан Республикаһының
«Башҡортостан Республикаһы» нәшриәт йорто Дәүләт унитар предприятиеһы
Башҡортостан Республикаһының Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары буйынса агентлығы
Башҡортостан Республикаһының Яҙыусылар союзы
**Учредители:**
Государственное унитарное предприятие Республики Башкортостан Издательский дом «Республика Башкортостан»,
Агентство по печати и средствам массовой информации Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан
1991 йылдың ғинуарынан башлап сыға.
Башҡорт теләндә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с января 1991 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.



**Баш мөхәррир**
**Лариса Хашим ҡыҙы**
**АБДУЛЛИНА (**89872467974)
Мөхәрририәт
**Айнар БАЙБУЛАТОВ**
**Азамат ҒАРИПОВ**
**Фаkиһа ТУҒЫҘБАЕВА**
яуаплы сәркәтип
**Миңлегөл ТАЙСИНА**
биҙәлеш мөхәррире
**Майя ҠӘЙҮМОВА**
бүлек мөхәррирҙәре
**Миләүшә ВӘЛИЕВА**
**Айгөл ҒӘБИТОВА**



**Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: 450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13.**
**e-mail: akbuzat-journal@yandex.ru, сайт: www.rbsmi. ru/akbuzat.**
**Адрес редакции и издателя: 450079, Республика Башкортостан, г.Уфа, улица 50-летия Октября, 13.**



Зарегистрировано Управлением Федеральной службы по надзору в сфере связи, информационных технололгий и массовых коммуникаций по Республике Башкортостан 22 марта 2017 года. Свидетельство о регистрации ПИ № ТУ02–01588

Башҡортостан Республикаһы буйынса Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм күләмле коммуникациялар өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль идаралыҡ тарафынан 2017 йылдың 22 мартында ПИ № ТУ02–01588-се таныҡлыҡ менән теркәлде.

Редакцияла йыйылды һәм биттәргә һалынды. Баҫырға ҡул ҡуйылды 14.03.2023. Ҡағыҙ форматы 84х108 1/16.
Офсет ысулы менән баҫыла. Күләме 1,5 баҫма табаҡ.
2,52 шартлы баҫма табаҡ, 4,26 иҫәп-баҫма табаҡ.
Тиражы ???? дана. Заказ №2.0029.23
Индекс 73866. Һатыуҙа хаҡы ирекле.
Подписано в печать 14.03.2023
Дата выхода: 20.03.2023
Башҡортостан Республикаһының «Башҡортостан Республикаһы» нәшриәт йорто дәүләт унитар предприятиеһы филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәте типографияһында баҫылды.
Отпечатано в типографии Республиканского издательства «Башкортостан» - филиала государственного унитарного предприятия Республики Башкортостан Издательский дом «Республика Башкортостан».



**© «Аҡбуҙат», № 3 (383) – 2023.**


Тышлыҡта — Ирина ӘХМӘҘУЛЛИНА рәсеме.


Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.


podpiska.pochta.ru

# Бөтә класс менән – «Аҡбуҙат»ҡа!




Ғафури районы Нияз МӘЖИТОВ исемендәге Красноусол башҡорт гимназияһының 1 «В» класы уҡыусылары.



Учалы районы Баттал мәктәбенең башланғыс класс уҡыусылары.

# ШӘХЕС һәм МИН

Радий исеме яҡтылыҡ таратыусы тигәнде аңлата. Борон гректарҙа таралған булған. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров – Рәсәйҙең иң ҡеүәтле төбәгенең абруйлы етәксеһе. Халҡыбыҙ уға генерал Миңлеғәле Шайморатовҡа Рәсәй Геройы исемен биреүгә һалған көсө, ҡуйылған һәйкәл өсөн рәхмәтле! Малайҙарына исем ҡушҡанда, Фәрит Барый улы көслө ихтыярлы, маҡсатҡа ынтылыусан булһын, тип теләгән. Үҙенең ил өсөн хеҙмәте менән Радий Фәрит улы атаһының аманатына тоғро!




## ИКЕ РАДИЙ

Кескәй Радий Моратбаҡыевҡа исемде тап Радий Хәбировҡа хөрмәт йөҙөнән ҡушҡандар. Ул да март айында тыуған һәм быйыл уға биш йәш тула. Үтә яуаплы, зирәк, алсаҡ малай киләсәктә, аҙашы кеүек үк, ил хәстәре менән йәшәргә теләй. Сәйәсәт менән ҡыҙыҡһына, һүрәт төшөрөүгә әүәҫ. Машиналарҙың төрөн айыра, дуҫтары күп, ҡыҙҙарҙы кәнфит менән һыйларға ярата. «Шайморатов генерал» йырын ятлап алып, өйҙәгеләренә көн дә шуны башҡара икән. Кескәй Радийҙың да алдынғы ҡарашлы, маҡсатҡа ынтылыусан егет булып үҫеүен теләйбеҙ!



Индексы 73866

һатыуға хаҡы ирекле.

podpiska.pochta.ru